

*Айзилә МОРТАЕВА*

# КҮҢЕЛДӘРҘЕ АРБАУСЫ ТЕАТР

Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт драма театры республикабыҙҙа бай тарихлы традициялары, үҙ йөҙө, үҙ тамашасыһы булған милли үҙенсәлекле театрҙарҙың береһе. Ул күк Ирәндек буйында матурлыҡ, нәфислек донъяһы ҡороп, тамашасы күңеленә рухи байлыҡ өләшеүсе, мәҙәниәтебеҙҙе яҡтыртыусы йәнле усаҡ булып тора.

Оло тәжрибәле, абруйлы театр тарихында шатлыҡлы ваҡиға — ул 75 йыллыҡ күркәм юбилейын билдәләй.

1931 йылдың июнь айында күренекле режиссер-педагог Мәкәрим Мәһәҙиевтың уҡыусылары, Башҡорт сәнғәт техникумын тамамлаусы туғыҙ йәш артист — Арыҫлан Мөбәрәков, Зәйнәб Ниғмәтуллина, Хәнифә Искәндәрова, Сания Йәнбухтина, Сынтимер Баҡыев, Сәхи Сәйетов, Шәғәле Һөйәрғолов, Мөхәммәт Ишҡабулов, Ғәшиә Абыҙгилдиналар Стәрлетамаҡ ҡалаһына башҡорт театры ойоштороу өсөн эшкә ебәрелә. Баш режиссер вазифаһына исеме һуңғараҡ бөтә ил күләмендә билдәлелек яулаған мәшһүр артисыбыҙ, ысын мәғәнәһендә сәхнә арыҫланы, йәш, дәрт-дарманы ташып торған Арыҫлан Мөбәрәков тәғәйенләнә. Администратор итеп Шәғәле Һөйәрғолов билдәләнә. Шулай итеп, республикабыҙҙың икенсе башҡорт профессиональ театрына нигеҙ һалына.

Ижади төркөмдө нығытыу маҡсатында шул уҡ йылды театрға тағы ла унлаған һәләтле егет һәм ҡыҙ өҫтәлә. Улар араһында Башҡортостандың халыҡ артисы исеменә лайыҡ булған Бикташ Кәлимуллин, оҫта гармунсы Фәйзулла Ғәйфуллин, ҡурайсы Хәмит Әхмәтов, талантлы артистар Ниғмәт Хәсәнов, Кәли Ғилметдиновтар була. Йәш һәүәҫкәрҙәр тиҙ арала коллективта үҙ урындарын табып, ең һыҙғанып эшкә тотона.

Йәшлек дәрте урғылып, күңелдәрендә сәнғәткә сикһеҙ һөйөү усағы дөрләгән йәш коллективтың тәүге сәхнә эше — күренекле драматург А.Глебовтың “Дау” спектакле була. Был спектаклдә уйнаған Бикташ



*Төрлө спектаклдәрҙән күренештәр*

Кәлимуллин, Сания Йәнбухтина, Хәнифә Искәндәрова, Сәхи Сәйетов, Зәйнәб Ниғмәтуллина һәм башҡалар театрҙың гастролгә сығыуының тәүге көндәренән үк тамашасыларҙың оло ихтирамын яулай. Һис шикһеҙ, тәүге уңыш йәш коллективҡа ҡанат ҡуя, үҙ мөмкинлектәренә ышаныс-ты нығыта.

“Дау” спектаклен ҡараған ауыл халҡы үҙҙәренең ысын сәнғәт донъяһына юлығыуын, профессиональ артистар менән осрашыуын тоя. Артабан инде театрҙы һәр ауылда түҙемһеҙлек менән көтөп алалар, артистар менән осрашыу халыҡ өсөн оло байрамға әүерелә.

Һуңынан патриотик рухтағы “Гудок”, “Дауыл”, “Үҙ юлынан”, “Яҙ йыры” кеүек әҫәрҙәр сәхнәләштерелә. Яңы сәхнә әҫәрҙәре менән бергә төрлө концерттар, тамашалар ҙа ҡуйыла.

1932 йылда Урал аръяғы районлары халҡының мәҙәни ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү маҡсатында республика хөкүмәтенең махсус ҡарары менән театр Баймаҡ ҡалаһына күсерелә һәм Баймаҡ колхоз-совхоз театры тип атала башлай. Коллектив тәүге спектаклдәре менән Түбә, Бүребай, Семен, Юлалы, Байҡара халҡы алдында сығыш яһай. Йәш коллективҡа республиканың күренекле сәнғәт һәм мәҙәниәт эшмәкәрҙәре лә ижади ярҙам күрһәтеп тора.

Бында төрлө йылдарҙа билдәле сәхнә оҫталары: режиссерҙар Елизавета Сыртланова, Ғәмбәрә Мансурова, рәссамдар Ғәлиә Имашева һәм Мөхәммәт Арыҫланов, композиторҙар Х.Мансуровский һәм Рәүеф Мортазин, бейеүсе Заһиҙә Бәхтийәрова, артистар Мәхмүт Хәбибуллин, Ғата Арыҫланов, Мәғәфүр Хисмәтуллин, Суфия Батыршина, ҡурайсылар Ишмулла Дилмөхәмәтов, Ғата Сөләймәнов һәм башҡалар ижади сынығыу юлы үтә.

1932—1933 йылдарҙа театрҙың художество етәксеһе һәм директоры булып Ҡадир Ҡаҙый улы Бакиров эшләй. Ул, башҡорт театр сәнғәтенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе булараҡ, актерҙарҙың профессиональ оҫталығын үҫтереүҙә һәм театрҙың үҙ ижади йөҙөн булдырыуҙа оло хеҙмәт күрһәткән шәхес, 1952 йылдың авгусынан 1958 йылға тиклем баш

режиссер булып эшләү дәүерендә лә махсус теоретик әҙерлекле белгес театрға Мәскәү мәҙәниәте балҡышын, илебеҙҙең бөйөк сәхнә оҫталары К.С.Станиславский һәм В.И.Немирович-Данченко һулышын алып килә. Ул донъя классикаһын да, туғандаш халыҡтар драматургияһын да, шәхси мөнәсәбәтен сағылдырып, юғары кимәлдә сәхнәләштерергә ынтыла. Ҡадир Бакиров сәхнәләштергән М.Кәримдең “Яңғыҙ ҡайын”, Н.Иҫәнбәттең “Райхан”, Д.Юлтыйҙың “Ҡарағол”, Ҡ.Даяндың “Дим буйында”, Н.Гоголдең “Өйләнеү”, А.Волковтың “Ксенья” (“Шәмсинур”) һәм башҡа әҫәрҙәр театр тормошона матур, сағыу яңылыҡ индерә.

1935 йылда йәш, әммә нығынып өлгөргән Баймаҡ театры Мәскәүҙә үткән колхоз-совхоз театрҙарының Бөтә Союз олимпиадаһында ҡатнаша һәм А.Таһировтың “Алатау” (режиссеры — Ҡ.Бакиров) һәм Д.Юлтыйҙың “Ҡарағол” (режиссеры — Ғ.Ушанов) драмаларын күрһәтеп, маҡтаулы икенсе урынды яулай. Коллектив автомобиль менән бүләкләнә.

1937 йылдан башлап, театр хужалыҡ иҫәбенә күсерелеү сәбәпле, эшләү шарттары күпкә ауырлаша. Ошо йылдарҙа художество етәксеһе вазифаһын баҫҡан ерендә ут сәсрәтеп торған талантлы артист Ғиниәт Ушанов башҡара. Ул үҙенең актерлыҡ юлын Түбә ҡасабаһында, күренекле драматург Мирхәйҙәр Фәйзи етәкселегендәге халыҡ театрында (шахтерҙарҙың һәм крәҫтиән йәштәренең 20-се йылдарҙа ойошторолоп, 30-сы йылдарға тиклем ғәжәп киң танылыу яулап эшләгән үҙешмәкәр коллективы) башлай. Аҙаҡ, Башҡорт академия драма театрына күскәс, профессиональ актерҙар сафына баҫа һәм театрҙың төп ижади көстәренең береһе була.

Талантлы режиссер Ғиниәт Ушанов Баймаҡ театрында Мөхәмәтша Буранғоловтың “Башҡорт туйы”, Дауыт Юлтыйҙың “Ҡарағол” драмалары, “Маҡтымһылыу” трагедияһы, Сәғит Мифтаховтың “Һаҡмар”, “Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт”, “Зимагорҙар”, Н.Островскийҙың “Ҡорос нисек сыныҡты” романы буйынса уңышлы сәхнә әҫәрҙәре ҡуя.

1938 йылда ижади коллективты театрҙың тәүге аҙымдарынан уҡ режиссер ассистенты булып эш башлаған һәләтле режиссер Сәхи Сәйетов етәкләй. Ул И.Насириҙың “Ялҡау Бикмөхәмәт”, Ғ.Иҙрисовтың “Өҙөлгән тамырҙар”, Б.Бикбайҙың “Ҡарлуғас” әҫәрҙәрен бер-бер артлы сәхнәләштерә һәм театрҙың артабанғы үҫешенә булышлыҡ итә.

*”Ҡарлуғас” драмаһынан күренеш*



Был йылдарҙа театр репертуарында билдәле драматург Сәғит Мифтаховтың әҫәрҙәре айырыуса ныҡлы урын ала.

“Пандар илендә”, “Зимагорҙар”, “Һаҡмар”, “Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт”, “Ялан ҡыҙы” драмалары халыҡтың яратып ҡараған сәхнә әҫәрҙәренән һанала.

Татар драматургы Тажи Ғиззәттең дә ижады театрҙың үҫешенә ҙур өлөш индерә. Уның Мансур Лоҡманов ҡуйған “Бишбүләк”, Сәхи Сәйетов ҡуйған “Сатҡылар”, Ғәйфулла Сарбаев сәхнәләштергән “Ташҡындар” исемле әҫәрҙәре революцион рух менән һуғарылған тәрән психологик спектаклдәр рәтендә була.

Бер үк ваҡытта режиссерҙар рус классикаһының күренекле әҫәрҙәрен сәхнәләштереүҙе лә дауам итә. Н.Гоголдең “Өйләнеү”, А.Островскийҙың “Ғәйепһеҙ ғәйеплеләр”, А.Чеховтың “Айыу”, “Тәҡдим” исемле пьесалары буйынса ҡуйылған спектаклдәр тамашасылар тарафынан яратып ҡабул ителә.

...Бөйөк Ватан һуғышының шанлы шауҡымы театр коллективын да ситләп уҙмай, һуғыштың тәүге көндәренән үк коллективтың ир-егеттәре фронтҡа китә. Театрҙың ижади усағын һүндермәү бурысы ҡатын-ҡыҙ артисткалар — Ғәшиә Абыҙгилдина, Биби Мәһәҙиева, Йәмилә Абитаева, Камал Ихсанова, Мәнфүсә Азаматова, Мәрхәбә Ғәбйәлиловаларҙың иңенә төшә, ә ир-егеттәрҙән Сәхи Сәйетов һәм үҙешмәкәр түңәрәктәрҙән яңы ғына килгән үҫмерҙәр Фәйзрахман Рыҫҡужин, Марат Баһауетдинов, Хәмзә Ҡурсаев, Ишмулла Дилмөхәмәтов, Бикйән Солтангилдин ғына ҡала. Улар театрҙың киләсәген һаҡлап ҡалыусы төп көстәр була. Театрҙың директоры вазифаһын Ғәшиә Абыҙгилдина, ә баш режиссер эшен Сәхи Сәйетов алып бара. Был ауыр йылдарҙа, кадрҙар етешмәүенә һәм матди ауырлыҡтарға ҡарамаҫтан, халыҡты рухи ныҡлыҡҡа, еңеүгә дәртләндереүсе героик характерҙағы пьесалар сәхнәләштерелә, һуғышҡа нәфрәт, көрәш рухы менән һуғарылған концерттар, бәләкәй формалағы яңы спектаклдәр кешеләрҙең ҡараңғы, төҫһөҙ тормошон аҙ ғына булһа ла яҡтылыҡҡа сорнай, күңел күтәренкелеге, хеҙмәт дәрте өҫтәй.

Һуғыштың икенсе, өсөнсө йылдарында театр коллективы Р.Ниғмәтиҙең “Урман шаулай”, Х.Ибраһимовтың “Ватан саҡыра” һәм “Башмағым”, Ҡ.Даяндың “Таңсулпан”, Р.Ишмораттың “Ҡайтыу”, Б.Бикбайҙың “Ҡаһым түрә” драмалары киңүк күләмле әҫәрҙәрҙе лә сәхнәгә сығарыуға өлгәшә. Ул йылдарҙа республиканың күренекле артисы һәм дәүләт эшмәкәре

*Театрға нигеҙ һалыусылар режиссер М.Мәһәҙиев менән*



# Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрына — 75 йыл



Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге

# Сибай

дәүләт башҡорт драма театры



булып танылған Арыҫлан Мөбәрәковтың тыл батырҙарына арнап яҙған “Бисәкәй” исемле пьесаһы бик ваҡытлы һәм көслө спектакль булыуы менән айырылып тора, халыҡтың иғтибарын үҙенә йәлеп итә.


Ял ваҡытында

Һуғыш йылдарында сәхнәлә ир-егет ролдәрен ҡатын-ҡыҙҙар һәм үҫмер егеттәр башҡара. Был тәңгәлдә бигерәк тә Биби Мәһәҙиева менән Хәмзә Ҡурсаев ҙур оҫталыҡ күрһәтә. Ни тиклем генә ҡыйын булмаһын, килеп тыуған ауыр хәлдән сығыу юлдарын табып, туған коллектив нигеҙен һаҡлап алып ҡалыу, уның эшен шундай юғары рухта дауам иттереү — үҙе үк ҙур батырлыҡ.

Ҡәһәрле һуғыш бер кемде лә аямай. Театр коллективына ла бер-бер артлы ҡара ҡағыҙ килә. Тыуған ил өсөн баш һалған ил батырҙарының исемдәре театр тарихынан бер ваҡытта ла юйылмаясаҡ. Һуғыштан һуң туған коллективына ни бары ике генә кеше: Мансур Лоҡманов һәм Ғәйфулла Сарбаев әйләнеп ҡайта. Улар ҡайтыу менән театр эшмәкәрлеге бермә-бер йәнләнә.

Ғәйфулла Сарбаев Башҡорт кавалерия дивизияһында һуғыш юлы үтә. Ҡаһарман кавалерист полкташтары алдында үҙен ҡурҡыу белмәҫ ҡыйыу һуғышсы, дәртле бейеүсе, йырсы, ҡурайсы, аккордеонист итеп таныта. Беҙҙең зенитчиктар бәреп төшөргән фашист самолетының еҙ көпшәһенән эшләп алған ҡурайы Ғ.Сарбаевтың айырылмаҫ юлдашы, моңдашы, көс-ҡеүәт биреүсеһе була. Әлеге көндә ул еҙ ҡурай Башҡортостан Республикаһының Милли музейында һаҡлана.

Күп яҡлы талантлы, йәш, әммә утты-һыуҙы кисеп өлгөргән яугир Ғәйфулла Сарбаев ижади көстәргә сарсаған театр өсөн оло бер хазина була. РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы Сибай театрына үҙенең бөтә ялҡынлы ижади ғүмерен арнай — тиҫтәләгән образ тыуҙыра һәм утыҙҙан ашыу әҫәр сәхнәләштерә. М.Әмирҙең “Тормош йыры”, И.Абдуллиндың “Бажалар”, Ғ.Әхмәтшиндың “Тальян гармун”, бүрәт яҙыусыһы Ц.Шагжиндың “Хәйләкәр Буҙамша”, М.Кәримдең “Яңғыҙ ҡайын” әҫәрҙәре сәхнәлә ҙур уңыш менән бара.

Театрға тәүге һулыш биреүселәрҙең береһе, БАССР-ҙың халыҡ артисткаһы Ғәшиә Абыҙгилдина ла ауыр һуғыш йылдарында һәм унан һуңғы осорҙа хәстәрлекле етәксе һәм йөҙҙән ашыу төрлө характерлы ролдәр башҡарыусы талантлы актриса булараҡ театр йылъяҙмаһында юйылмаҫ эҙ ҡалдырҙы. Театрҙың һуғыш йылдарында ябылмай, бөгөнгө көндәргә тиклем килеп етеүендә иң беренсе сиратта Ғәшиә ханымдың — көслө рухлы, аҡыллы, гүзәл шәхестең өлөшө иҫ киткес ҙур.

Бөйөк Ватан һуғышы осороноң тере тарихын һаҡлаған, үҫмер сағынан уҡ үҙен сәхнәгә бағышлаған, хәҙер инде Башҡортостандың халыҡ һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған артисы Хәмзә Ҡурсаев та бөгөн, хаҡлы ялда булыуына ҡарамаҫтан, театр менән тығыҙ бәйләнештә йәшәй. Хәмзә Ҡурсаев — талантлы артист булып та, моңло тауышлы йырсы булараҡ та ихтирам ҡаҙанған хеҙмәт ветераны. Уның йырлау оҫталығы, мөһабәт буй-һыны, һәр образдың характер һыҙаттарын нескә тойомлауы һәм шуларҙы сәхнәлә оҫта тормошҡа ашырыуы уға төрлө типтағы геройҙарҙы һынландырырға ярҙам итте. Ә.Мирзаһитовтың “Утлы өйөрмә” драмаһында — Айтуған, Х.Ибраһимовтың “Башмағым” музыкаль комедияһында — Ғәлимйән, Д.Юлтыйҙың “Ҡарағол” драмаһында — Ҡарағол, Ғ.Әхмәтшиндың “Тальян гармун”ында Ҡуян Ғәләүи — Хәмзә Ҡурсаевтың ижад ҡаҙнаһындағы аҫыл табыштарының бер нисәһе генә. Йәштәрҙең терәк-кәңәшсеһе, театрыбыҙҙың аҡһаҡалы Хәмзә Ҡурсаев әле лә алдынғы сафта.

50-се йылдарҙа театрға үҙешмәкәр түңәрәктәрҙән Ҡәйүм Хөсәйенов, Хәлил Асҡаров, Мөхәммәт Шәрипов һәм сәнғәт училищеһын тамамлаған Кифая Хәбибуллина, Тайфа Ишемғолова, Хәлит Хәсәнов, һуңғараҡ Рәзинә Ҡаһарманова, Мөнирә Әхмәтғәлиева, Ямал Мөхөтдинова, Әлтәф Мостафин кеүек талантлы йәштәр килә.

1951 йылда Ҡыйғы колхоз-совхоз театры ябылыу сәбәпле, Баймаҡ театрына эшкә килгән Закирйән Ханов, Шәмсинур Сиражетдинова, Мырҙашәриф Миңлишев, Ямал Миңлишевалар төп ижади көстәр рәтендә була.

1954 йылдың ноябрь айынан Баймаҡ колхоз-совхоз театры Баймаҡ башҡорт дәүләт драма театры тип исемләнә һәм 1957 йылдың октябрендә таусылар ҡалаһы Сибайға күсерелә.

50—60-сы йылдарҙа театр, халыҡтар дуҫлығы темаһын үҫтереп, башҡорт телендә рус, татар, эстон, белорус, үзбәк, төркмән, ҡытай, бүрәт, монгол һәм башҡа халыҡтар драматургтарының пьесаларын сәхнәләштерә. Н.Гоголдең “Өйләнеү”, А.Островскийҙың “Ете юл сатында”, А.Макаеноктың “Трибунал”, Эгон Ранеттың “Юлдан яҙған бала”,

*Гастролдәр мәлендә*



В.Эльтондың "Хужа Насретдин", Цао Юйҙың "Тайфун", Хәй Вәхиттең "Беренсе мөхәббәт", Цырен Шагжиндың "Хәйләкәр Буҙамша", Ғөзәир Ғаджибәковтың "Аршин мал-алан" әҫәрҙәре башҡорт театры сәхнәһендә башҡа милләт халҡы мәҙәниәтенең матур сағылышы булды.

Эш шарттары ҡатмарлы, театрҙың үҙ бинаһы булмау һәм күсмә шарттарҙа эшләүгә ҡарамаҫтан, яңынан-яңы спектаклдәр донъя күрә. Коллектив Башҡортостанда ғына түгел, күрше өлкәләрҙә лә киң танылыу яулай. Был йәһәттән режиссерҙар Ҡадир Бакиров, Ғәйфулла Сарбаев ҙур роль уйнай. Бигерәк тә башҡорт халҡының тарихи үткәненә арналған милли рухтағы "ҠараҒол" драмаһының сәхнәләштерелеүе (режиссеры — Ҡ.Бакиров) Башҡортостандың театр сәнғәте тарихында оло ваҡиға була.

1961 йылдың көҙөндә Башҡортостан Министрҙар Советы ҡарары нигеҙендә Сибай башҡорт дәүләт драма театры Башҡортостандың Сиҙәм ерҙәр театры тип үҙгәртелә. Сиҙәм ерҙәр театры, үҙенең утыҙ йыллығын билдәләп, күп кенә яңы спектаклдәр сәхнәләштерә. Шуларҙың береһе — Әсғәт Мирзаһитовтың бөйөк революцион көрәш героикаһына арналған "Утлы өйөрмә" драмаһы. Был әҫәр театрҙың үҫеш кимәлен билдәләүсе мөһим бер ваҡиға була. Уны Мәскәүҙән талантлы сәхнә оҫтаһы Андрей Александрович Муат килеп ҡуя.

1964 йылда Сибай театрының баш режиссеры вазифаһына йәш, махсус юғары белемле Рафаэль Мөхәммәт улы Әйүпов тәғәйенләнә. Уның тәүге сәхнә эштәре — М.Кәримдең "Ай тотолған төндә", С.Айтматовтың "Юғалған мөхәббәт" исемле драмалары нигеҙендә кеше һәм халыҡ яҙмышы киң планда кәүҙәләндерелгән, тәрән психологик кисерештәр менән һуғарылған. Шулай уҡ С.Айтматовтың "Ал яулыҡлы тирәккәйем", Н.Асанбаевтың "Кеше бәхете", Ж.-Б.Мольерҙың "Тартюф", Ә.Мирзаһитовтың "Һалдат улы", Ә.Атнабаевтың "Шоңҡар" әҫәрҙәре театр үҫешендә яңы ижади баҫҡыс була. Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Рафаэль Әйүпов, Сибай драма театрында тиҫтәләгән спектаклдәр сәхнәләштереп, тамашасы ихтирамын яулай, актерҙарҙың профессиональ оҫталыҡтарын үҫтереү өлкәһендә лә уңышлы эшләй.

1968 йылдың май айынан театр яңынан Сибай башҡорт драма театры тип атала. Театр директоры вазифаһын Вәлихан Фәтҡуллин атҡара, баш режиссер итеп утты-һыуҙы кискән тәжрибәле артист һәм яугир Фәтхелислам Ғәләүетдинов тәғәйенләнә. Артистарҙың сәхнә сәнғәтендә өлгәшкән уңыштарына лайыҡлы баһа биреү ошо осорҙа башлана. Башҡортостандың атҡаҙанған артисы исеменә ветерандар Биби Мәһәҙиева, Йәмилә Абитаева, Ғәшүрә Ирназарова, Закирйән Ханов, Хәмзә Ҡурсаев, Ҡәйүм Хөсәйенов, Шәмсинур Сиражетдинова, Кифая Хәбибуллина, Мөнирә Әхмәтғәлиева лайыҡ була. Артабан Закирйән Ханов менән Хәмзә Ҡурсаевҡа Башҡортостандың халыҡ артисы исеме бирелә. Баянсы, үҙешмәкәр композитор Марс Хәсәнов, реквизит цехы мөдире Миңлеямал Ғүмәрова, парик-гримерҙар цехы мөдире Файҙа Шәфиева (Хөсәйенова), театр директоры Вәлихан Фәтҡуллиндар Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре исеменә лайыҡ була.

Милли драматургиябыҙҙың сәскә атҡан осоро Сибай театры сәхнәһенә лә йәм өҫтәне. Ә.Атнабаевтың "Мөхәббәт тураһында йыр", "Балаҡай-


*И.Абдуллин, ”Йыр булып кайтырмын”*

ҙарым”, И.Абдуллиндың “Их, Өфө ҡыҙҙары!”, “Йыр булып ҡайтырмын”, Ғ.Әхмәтшиндың “Урау-урау юлдарҙан”, “Тальян гармун”, Н.Асанбаевтың “Һыу юлы”, “Зәйтүнгөл”, М.Хәйҙәровтың “Ҡоҙалар, ҡоҙасалар”, Р.Янбулатованың “Байрамбикә”, М.Кәримдең “Салауат”, Ғ.Байбуриндың “Аҡ ҡоҙғон” һәм башҡа халыҡсан әҫәрҙәр тамашасы күңеленә үтеп инде.

Тәжрибәле режиссерҙың тырышлығы менән яңы драматургтарҙың исемдәре күренә башлай. Ф.Богдановтың “Мөхәббәт һәм енәйәт”, “Иртәнге томан”, Г.Исхаҡовтың “Бөркөт ҡанаты”, “Аҫылташ”, Н.Ғәйетбаевтың “Ҡойма ямғырҙа” әҫәрҙәренең Сибай театры сәхнәһендәге уңыштары йәш авторҙарға ижади дәрт, илһам бирә.

1975 йылдың февралендә театрҙың директоры вазифаһына оҙаҡ йылдар коллективтың партия ойошмаһын етәкләгән тәжрибәле актриса Рәзинә Дәүләт ҡыҙы Ҡаһарманова тәғәйенләнә. Сибай театры абруйының йылдам үҫеүе тап ошо йылдарға тура килә. Коллектив республика театрҙары араһында алдынғылар сафына сыға. Баш ҡалабыҙ Өфөлә, Башҡортостандың барлыҡ райондары һәм ҡалаларында, Ҡазан, Екатеринбург ҡалаларында, Силәбе һәм Ырымбур өлкәләрендә үткән гастролдәр Сибай театрының абруйын бермә-бер күтәрә. Йәйге гастролдәрҙә, ике-өс төркөмгә бүленеп, төрлө тараф тамашасылары алдында һынау тотоуҙар һәр яҡтан ыңғай йоғонто яһай.

70—80-се йылдарҙа ижади коллективтың төп көстәре — Закирйән Ханов, Шәмсинур Сиражетдинова, Ҡәйүм Хөсәйенов, Рәмзиә Әҙелшина, Хәмзә Ҡурсаев, Кифая Хәбибуллина, Мәрйәм Ямалетдинова, Рәзинә Ҡаһарманова, Мөнирә Әхмәтғәлиеваларға Өфө сәнғәт училищеһын һәм сәнғәт институтын тамамлаған йәш актерҙар өҫтәлә. Бөгөн улар театр яҙмышына үҙҙәренең ныҡлы эҙҙәрен һалған билдәле сәхнә оҫталары — Рәмилә Хоҙайғолова, Әнүәр Ғәтиәтуллин, Заһир Вәлитов, Риф Сәйфуллин, Рәсүл Баһауетдинов, Мулланур Ниғмәтуллин, Әсҡәт Йәнбәков, Фариза Хәсәнова, Рәмилә Сәлимгәрәева, Вәкилә Ҡалмантаева, Вәкил Йосопов, Зифа Баязитова, Хисмәтулла Дәүләтов, Сәлихйән Әфләтунов, Рәдиф Яңыбаев һәм башҡалар.

Үҙенсәлекле режиссерҙар — Ф.Ғ.Ғәләүетдинов (Т.Миңнуллин, “Диләфрүзгә дүрт кейәү”; Ә.Мирзаһитов, “Әсәләр көтәләр улдарын”, “Утлы өйөрмә”; Ф.Шиллер, “Мәкер һәм мөхәббәт”; М.Ғафури, “Ҡара йөҙҙәр” һ.б.), Р.Әйүпов (А.Дударев, “Һуңғы аҙым”; И.Абдуллин, “Төштәр оҙон булмай”; И.Йомағолов, “Семәрле тәхет”; Р.Хәмид, “Китәм инде”; Н.Ғәйетбаев, “Дүрт кешелек табын”, “Абау! Кем ята унда?”, “Илама, һылыу”; Р.Сафин, “Ғәзизәкәй балдыҙ” һ.б.), К.Нәҙершин (Н.Асанбаев, “Зәйтүнгөл”; Ғ.Әхмәтшин, “Туй күлдәге”; Г.Исхаҡов, “Аҫылташ”; А.Вампилов, “Стар-

Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге

# Сибай

дәүләт башҡорт драма театры





ший сын” һ.б.) төрлө тематикалы һәм төрлө жанрлы сәхнә әҫәрҙәрен сәхнәләштереп, һәр береһе театр тарихында, артистар һәм тамашасылар күңелендә яҡты эҙ ҡалдырҙы.


*Гастролдәр вакытында (1975 йыл)*

Сибай театрында төрлө йылдарҙа эшләп киткән режиссерҙар Ким Нәҙершин, Алик Сәфиуллин, Байрас Ибраһимов хаҡында ла театр яҡты хәтирәләр һаҡлай.

1987 йылда театр директоры вазифаһына Сибай халыҡ театрында оҙаҡ йылдар режиссер булып эшләүсе Дамир Мәжит улы Ғәлимов, ә баш режиссер вазифаһына Лек Вәли улы Вәлиев тәғәйенләнә.

РСФСР-ҙың һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Лек Вәлиев Сибай сәхнәһендә эшләү дәүерендә Башҡортостан театр сәнғәте һәм мәҙәниәте тарихында ғәйәт ҙур әһәмиәткә эйә булған әҫәрҙәрҙе сәхнәләштерҙе. Күренекле башҡорт ғалимы, халыҡ сәсәне, драматург Мөхәмәтша Буранғоловтың “Башҡорт туйы” һәм башҡорт әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе Мәжит Ғафуриҙың “Ҡыҙыл йондоҙ” драмаларын — партия идеологияһы тарафынан тыйылған әҫәрҙәрҙе — 50 йылдан һуң ҡайтанан сәхнәгә сығарыусы булды ул. Уның сәхнәләштереүендәге М.Садиҡованың “Бергенәм — гөлгөнәм”, Н.Рыбаковтың “Балам — бауыр ярам” спектаклдәрен дә тамашасылар һәм артистар йылы тойғолар менән иҫкә ала.

1991 йылдың сентябрендә, театрҙың 60 йыллыҡ юбилей тантанаһында, Башҡортостан Министрҙар Советы ҡарары менән Сибай башҡорт дәүләт драма театрына башҡорт сәхнәһендә генә түгел, Рәсәй һәм сит ил сәхнәләрендә лә танылыу яулаған, театрҙың тәүге художество етәксеһе, СССР-ҙың халыҡ артисы Арыҫлан Мөбәрәков исеме бирелә. Абруйлы исем алған Сибай башҡорт дәүләт драма театры ошо бөйөк сәхнә ҡаһарманының исеменә лайыҡлы булып, уның күркенә һәм шөһрәтенә тап төшөрмәй, республикабыҙ театрҙары араһында үҙ йөҙөн юғалтмай, яңы үрҙәргә ынтылып эшләүҙе төп маҡсаты итеп, сәмләнеп, дәртләнеп эшләй.

Театрҙың абруйын һаҡлау өсөн иң элек әһәмиәте менән көн ҡаҙағына һуҡҡан репертуар һайлап алыу, ижади төркөмдөң үҫешенә булышлыҡ итерҙәй әҫәрҙәр табыу мөһим. Ниндәй генә ҡаршылыҡтар осоронда ла тоторо̆кло ижад итеү, үҙ тамашасыңды юғалтмау — театрҙың төп бурыстарының береһелер, моғайын. Шуныһы ҡыуаныслы, был йәһәттән театр ыңғай һөҙөмтәләргә ирешә килә. Үҙенең оло быуын тамашасылары менән бер рәттән йәштәрҙең дә ихтыяждарын ҡәнәғәтләндерә.



*Театрҙың художество етәксеһе Д. М. Ғәлимов*

Бына егерме йыл инде абруйлы театрҙы Башҡортостандың һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, күренекле режиссер Дамир Мәжит улы Ғәлимов етәкләй. Талантлы режиссер, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Сәлихйән Әфләтуновтың ижады ла халыҡтың рухын, театрҙың бәҫен тағы ла юғарыраҡ күтәреүсе өлгөләргә бай. Дамир Ғәлимов сәхнәләштергән һәм театрҙың алтын фондына ингән Флорид Бүләковтың "Һөйәһеңме — һөймәйһеңме?" трагикомедияһы, "Ҡыҙҙар ни өсөн илай?" мелодрамаһы, "Эх, буйҙаҡтар, буйҙаҡтар..." комедияһы, Наил Ғәйетбаевтың "Төн" ("Әлдә төнөн йондоҙ бар"), Тамара Ғәниеваның "Тамарис" трагедиялары, Таңсулпан Ғарипованың "Тәңкәле ҡыҙ", "Китмәгеҙ, торналар" драмалары һәм башҡа бик күп спектаклдәр театр тәнҡитселәре, тамашасылар тарафынан юғары баһа алды. Ә Зәйнәб Биишеваның "Тылсымлы ҡурай" драматик легендаһының тәүге тапҡыр сәхнәгә сығыуы башҡорт драматургияһында, милли театр сәхнәһендә һәм Сибай башҡорт дәүләт драма театры тарихында иҫтәлекле ваҡиға булды. Профессиональ театрҙар араһында үткәрелгән "Ҡолонсаҡ" балалар һәм үҫмерҙәр өсөн спектаклдәрҙең I Республика фестивалендә "Тылсымлы ҡурай" Гран-при яуланы.

Дамир Мәжит улы сәхнәләштергән "Ҡоҙаса" музыкаль комедияһының (З.Исмәғилев музыкаһы, Б.Бикбай либреттоһы) Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында мәшһүр йырсылар тарафынан башҡарылып, бөгөн инде драма театры репертуарына инеүе һәм сәхнәләштерелеүе үҙе бер оло күренеш. Актерҙарҙың ижад мөмкинлектәрен киң планда асыуға булышлыҡ иткән, театрҙың йөҙөк ҡашы булған был спектакль Мәскәү ҡалаһында уҙған Башҡортостан көндәрендә данлыҡлы Е.Вахтангов исемендәге театрҙа баш ҡала тамашасыларының да ҡайнар алҡыштарына лайыҡ булды.

Талантлы режиссер ҡуйған һәр сәхнә әҫәре артистарҙың да ижади биографияһында юйылмаҫ эҙ ҡалдыра. Мәҫәлән, 1993 йылда "Төн" трагедияһында төп ролде — Һәҙиә Дәүләтшина ролен башҡарған Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Рәмилә Хоҙайғолова, 1995 йылда "Ҡоҙаса" музыкаль комедияһында Шәмсиә ролен уйнаусы Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Рәмилә Сәлимгәрәева, ҡатын-ҡыҙ ролен иң яҡшы башҡарыусы тип баһаланып, Бәҙәр Йосопова исемендәге премияға лайыҡ булдылар. Шул уҡ "Ҡоҙаса"ла Ильяс образын башҡарған йәш актер, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Марс Итбаев фестивалдең "Өмөт" призын яуланы.

Һәләтле режиссер, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Сәлихйән Ғиниәт улы Әфләтуновтың режиссерлыҡ эше 1993 йылда Наил Ғәйетбаевтың "Тойғолар ниңә һүнә?" драмаһын сәхнәләштереүҙән башланғайны. Бөгөн инде ул хәҙерге заман әҫәрҙәренән башҡа, Н.Гоголдең "Өйләнеү",

А.Островскийҙың “Банкрот” (“Берәү бөлә — берәү көлә”) пьесалары кеүек классик әҫәрҙәрҙе лә уңышлы ҡуйыусы сәхнә белгесе. Сәлихйән Ғиниәт улы сәхнәләштергән һәр әҫәр үҙенең тормошсан, донъяуи булыуы, етди, көнүҙәк мәсьәләләрҙе күтәреп сығыуы менән театр тәнҡитселәре араһында ла, тамашасылар араһында ла оло ихтирам яуланы. Ул сәхнәләштергән ”Өйләнеү” спектакле 1994 йылда үткән ”Театр яҙы” республика фестивалендә ҙур уңыш яуланы: режиссер үҙе, талантлы артистар Мулланур Ниғмәтуллин, Риф Сәйфуллин, Әсҡәт Йәнбәков, Рәмилә Сәлимгәрәева һәм Юнир Ғәйнуллиндар лауреат булды. Таңсулпан Ғарипованың “Бәхеткә ҡасҡандар” фантасмагорияһы, Нәжиб Асанбаевтың “Өҙөлгән өмөт”, Әнғәм Атнабаевтың “Әсә хөкөмө” драмалары, Гөлшат Әхмәтҡужинаның “Абыстай” психологик драмаһы профессиональ кимәлдә тормошҡа ашырылыуы менән юғары баһаға лайыҡ булды.

2000 йылда театр коллективы төрки телле театрҙарҙың “Туғанлыҡ” халыҡ-ара фестивалендә Тамара Ғәниеваның “Тамарис” спектакле менән ҡатнашып, “Тамашасылар һөйөүе” номинацияһында еңеүсе тип табылды. Уҙған йылда Стәрлетамаҡ ҡалаһында үткән “Театр яҙы — 2005” фестивалендә театр коллективы шанлы һуғыш йылдарын сағылдырған “Әсә хөкөмө” (Ә.Атнабаев) спектакле менән уңышлы сығыш яһаны. Төп ролде башҡарыусы актрисабыҙ, маһир сәхнә оҫтаһы, Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Рәмилә Хоҙайғолова “Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле” номинацияһында еңеүсе тип күрһәтелде.

Бөгөн Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт драма театры — башҡорт халҡының мәҙәниәтен сағылдырыуы, һаҡлау һәм үҫтереү йәһәтенән Башҡортостандың иң алдынғы, иң мәртәбәле театрҙарынан һанала. Театрҙың репертуары ифрат бай. Йыл һайын ул яңы сәхнә әҫәрҙәре менән тулылана, байый. Ижади коллектив үҙ сәхнәһендә милли әҫәрҙәрҙе лә, туғандаш халыҡтар драматургияһын да, донъя һәм рус классикаһы өлгөләрен дә сәхнәләштерә.

Һуңғы йылдарҙа театр сәхнәһендә Т.Ғарипованың “Китмәгеҙ, торналар”, “Тәңкәбикә”, “Бәхеткә ҡасҡандар”, Ф.Бүләковтың “Бәлеш”, “Эх, буйҙаҡтар, буйҙаҡтар...”, Г.Әхмәтҡужинаның “Нисек түҙә был йөрәк”, Н.Ғәйетбаевтың “Аҡмулланың аҡ төндәре” һәм башҡа яңы әҫәрҙәр шаулап-гөрләп бара.

*”Китмәгеҙ, торналар” спекталенән күренеш*



Сибай театрында бик күп сәхнә йондоҙҙары оло ижадҡа тәүге аҙымдарын яһаны, ҡанат нығытты. Хәҙер инде улар республикабыҙҙың киң билдәле, талантлы шәхестәре. Араларында М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актерҙары — Башҡортостандың халыҡ, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған артисы, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Заһир Вәлитов, Башҡортостандың атҡаҙанған артис-


Ә.Атнабаев, ”Әсә хөкөмө”

тары Рива һәм Марат Исхаҡовтар, Алһыу Бәхтиева, Башҡортостандың халыҡ артисы Илдар Ғүмәров, йәш артист Арслан Йәнбәков, Милли йәштәр театры йондоҙҙары — Башҡортостандың халыҡ артисткалары Рәмилә Сәлимгәрәева менән Вәкилә Ҡалмантаева, Башҡортостандың атҡаҙанған артистары Нәғим Нурғәлин, Мәғәфүр Усманов, Стәрлетамаҡ башҡорт дәүләт драма театры актеры, Башҡортостандың халыҡ артисы Әскәт Йәнбәков, Өфө “Нур” татар дәүләт драма театры актрисаһы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисткаһы Нәжибә Искәндәрова, Башҡорт дәүләт филармонияһы конферансьеһы Рима Дашкина, талантлы йәш йырсы, Башҡортостан дәүләт телерадиокомпанияһы хеҙмәткәре Фәрүәз Урманшин, күренекле йәш композитор, Башҡортостандың Ш.Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаты Юлай Үҙәнбаев, йырсы Альберт Салауатовтар бар.

Әлеге көндә театр сәхнәһендә тәүге остаздарының исеменә, ижадына, рухына, ғөмүмән, театр тарихына тап төшөрмәй, бөйөк шәхестәр һалған матур традицияларҙы дауам итеүсе, шундай уҡ һәләтле, сәнғәт донъяһына йәне-тәне менән бирелгән талант оҫталары Башҡортостандың халыҡ артистары Рәмилә Хоҙайғолова, Зифа Баязитова, Риф Сәйфуллин, республикабыҙҙың атҡаҙанған артистары Рәдиф Яңыбаев, Фариза Хәсәнова, Хисмәтулла Дәүләтов, Нурзиә Әбдрәшитова, Юнир Ғәйнуллин, Марс Итбаев, Нәркәс Баязитова, театрыбыҙ ветерандары Марсель Хоҙайғолов, Башҡортостандың халыҡ артисы, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған артисы Хәмзә Ҡурсаев, Башҡортостандың атҡаҙанған артисткаһы, РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Рәзинә Ҡаһарманова, Башҡортостандың атҡаҙанған артистары Кифая Хәбибуллина, Әнүәр Ғәтиәтуллин, йәш йондоҙҙарыбыҙ Миңзилә һәм Айбулат Ҡотошовтар, Сулпан Әбдрәхимова, Әлфирә Ғәлләмова, Айгөл Хәкимова, Әлфирә Йосопова, Резеда Абдуллина, Арсен Шәйхисламов, Венер Сөнәғәтов, Урал Зәйнуллиндар ижад итә. Уларға сәнғәт училищеһының актерҙар әҙерләү бүлегенең беренсе сығарылыш студенттары Юнир Мансуров, Рима Саникина, Гүзәл Байғотлина, Айгөл Истәковалар өҫтәлде.

2004 йылда театр коллективы яңыртылған, заманса талаптар буйынса төҙөлгән һәм биҙәлгән өр-яңы бинаға күсте. Сибай ҡалаһының иң матур урындарының береһе булған театрҙа тағы ла илһамланып, дәртләнеп эшләргә, ҡолас ташлап ижад итергә ҙур мөмкинлектәр асылды.

Республикабыҙҙың арҙаҡлы театрҙарының береһе булған Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт драма театры бөгөн дә ижади бейеклектәр, яңы үрҙәр яулау юлында. Берҙәм һәм талантлы театр коллективы үҙенең 75 йыллыҡ юбилейын өр-яңы һулыш менән ҡаршылай.